*Зөһрә АЛТЫНБАЕВА*

# Бейеүсегә һүҙ әйтмәгеҙ...

Сәхнәлә бәләкәй генә ҡыҙ бала йырлай. Дүрт-биш йәштәр самаһы булыр уға. Икегә ярып үргән сәс толомдарын ҡулдарына тотоп алған, моң ыңғайына улар елпеп-елпеп китә.

Күҙе лә ҡара ғына,
Ҡашы ла ҡара ғына.
«Алам» тигән һүҙе булһа,
Бөгөндән барам ғына...

Тамашасылар һоҡланыуын йәшермәй. Ошо шаян йырҙы ололарса оҫталыҡ менән, йөҙөндә, күҙендә сағылдырып башҡарыуына ҡыуаналар. «Әйттерә бит, әй!», «Кемдең ҡыҙы?», «Торғаны бер әртис!» тигән хуплау һүҙҙәре ишетелә. Ихлас алҡышлайҙар. Ә ҡыҙыҡай һис кенә лә ҡаушамай, йырлай ҙа йырлай, кәрәк икән, бейеп тә ебәрә...

*“Ҡарлуғас“ бейеү ансамбле.*
*Етәксеһе Әхмәтшина Гөлимә Мырҙағәле ҡыҙы*



Бейеү тигән гүзәл илгә күптәр ошондай тәүге аҙымдар менән аяҡ баҫа. Тәүге сығыштар, тәүге алҡыштар көндәлдәренә һеңеп ҡала, киләсәген ошо матур, әммә ауыр хеҙмәт талап иткән бейеү сәнғәтенә бәйләй.

Бейеүҙең һәр хәрәкәтендә мәғәнә бар. Айырыуса башҡорт бейеүҙәре камиллыҡты талап итә. Алдан әҙерлеге булмаған балалар менән шөғөлләнеү айырыуса еңел түгел. Уларҙың ҡул-аяҡтарын, килеш-килбәтен, буй-һынын, хатта күҙ ҡараштарын да бейеүҙең асылына яраштыра белеү мөһим.

*Өфө ҡалаһының 20-се башҡорт гимназияһы ҡыҙҙары бейей*



Фатима Мостафина исемендәге Өфө ҡала башҡорт гимназияһы уҡыусыларын бейеү серҙәренә өйрәтеүсе Гөлимә Мырҙағәли ҡыҙы Әхмәтшина тап ошо үҙенсәлектәрҙе нескә аңлаған кешеләрҙең береһе. Йәмле Ашҡаҙар буйында тыуып үҫкән Гөлимә бәләкәйҙән бейеү-йырҙы үҙ итте. Үҙҙәре лә моңға ғашиҡ кешеләр, башланғыс синыфта уҡытҡан Мөнир Муллабаев, пионервожатыйҙары Фәриҙә Ильясова иһә ҡыҙыҡайҙы дәртләндереп торҙо, оҫталығын үҫтерергә булышты.

Урта мәктәпте тамамлаған Гөлимә тәүҙә педучилищеға уҡырға инергә теләй. Бирәһе килгән ҡолона, сығарып ҡуйыр юлына, тигәндәй, тап ошо йылда Стәрлетамаҡ ҡалаһында культура-ағартыу мәктәбе (һуңынан — училище) асыла. Гөлимә оҙаҡ уйламай, документтарын бейеү бүлегенә тапшыра. Училищены тамамлар мәлендә генә Стәрлетамаҡҡа Фәйзи Ғәскәров башҡорт халыҡ бейеүҙәре ансамбле менән гастролгә килә. Ул училищела уҡыусылар менән осраша, бейеү ансамбленә йәш таланттар кәрәкләген билдәләп, йәштәрҙе Өфөгә конкурсҡа килергә саҡыра. Конкурста еңгән ике ҡыҙ һәм ике егет араһында Гөлимә лә була.

Оло сәхнәгә, илаһи бейеү иленә юлы шулай башлана уның. Гөлимә, ошо данлы коллективтың бер вәкиле булып, шатлығынан ҡанатланып, сихри сәнғәт донъяһына сума. Бына ошонда төшөнә ул мәшһүр Фәйзи Ғәскәровтың оҫталыҡ, остазлыҡ серҙәренә: ул үҙе бейеү, балет сәнғәте өлкәһендә камиллыҡҡа өлгәшеү менән бер рәттән, ансамблдә бейегән һәр кемдә ошо сифаттарҙы үҫтерҙе, уның талантын асып, сәхнә йондоҙо итеүгә өлгәште. Гөлимә был сәнғәттең данын, матурлығын байытыуға үҙ өлөшөн индерергә тырышты, ошо хис-тойғо уны ал-ял белмәй, сикһеҙ ғорурлыҡ менән эшләргә мәжбүр итте, был иһә, үҙ сиратында, үҙе-

нең оҫталығын, маһирлығын арттырҙы.

Байтаҡ бейеүҙәр бейергә, бихисап илдәрҙә, төрлө төбәктәрҙә булырға тура килде уға. Һәр ерҙә яратып ҡаршы алдылар ансамблде, ихлас алҡышлап, тағы килегеҙ, тип оҙатып ҡалдылар. Артабан танылған бейеүселәр Йәнгәли Вәхитов, Илдус Хәбиров, баянсы Миңлеәхмәт Ғәйнетдинов менән бергәләшеп «Сәлимәкәй», «Дим ҡыҙҙары», «Ашҡаҙар ҡарлуғасы» кеүек шаян һәм дәртле бейеүҙәрҙе ижад итте улар.

Гөлимә Мырҙағәли ҡыҙы үҙе маһир бейеүсе булыу менән бергә оҫта педагог та. Бына тиҫтә йылдан ашыу ул Өфө ҡала башҡорт гимназияһы уҡыусыларына бейеү серҙәрен аса.

Әлбиттә, еңелдән түгел был һөнәр. Бала — бала инде. Тиҙ төшөнһә лә тиҙ онота. Шаяндары, шуҡтары ла етерлек. Һәр хәрәкәтте ҙур түҙемлек менән өйрәтергә кәрәк. Унып ҡарауы үҙ эшеңдең һөҙөмтәһен күреү ҡыуандыра: әле генә бейеп китеренә үҙе лә ышанмаған бала ихлас тыпырҙатып баҫа! Һығылмалы хәрәкәте, һомғол һыны һоҡландыра. Үҙ уҡыусыларынан бик ҡәнәғәт Гөлимә Мырҙағәли ҡыҙы. Смотр, фестиваль кеүек бәйгеләрҙә һис һынатмайҙар. 90-сы йылда уҡ смотрҙа балалар бейеү коллективы Өфө ҡалаһы райондарының мәктәптәре араһында 1-се урынды яуланы. Киләһе йылда Зөлфиә Биккинина Йомабай Иҫәнбаев иҫтәлегенә арналған фестивалдә дипломға лайыҡ булды. Артабан да район һәм ҡала бәйгеләрендә 1-се урынды бер кемгә лә бирмәне ҡарлуғастар. Гимназияның «Ҡарлуғас» бейеү коллективы 1998 йылда район фестивалендә лауреат, ә 2001 йылда «Серле йондоҙҙар» ҡала фестивалендә дипломант булды. Профессиональ бейеүсе, I категориялы педагог-хореограф үҙенең уҡыусыларына бейеү серҙәрен генә өйрәтеп ҡалмай, ә уларҙы ҡул-аяҡтарын, һын-ҡиәфәттәрен килешле итеп тотоуға, һәр хәрәкәтте аныҡ үҙләштереүгә алып килә. Үҙҙәрен һәр саҡ, һәр ерҙә килешле, матур тоторға өйрәтеп, сит ил һәм классик бейеүҙәр менән таныштырып, уҡыусыларҙа юғары мәҙәни зауыҡ тәрбиәләргә ынтыла.



Г.Әхмәтшина йәш артистар менән

— Һәр кемдең бейеүсе булыуы мотлаҡ түгел. Әммә тормошта ниндәй генә һөнәр һайлаһаң да бейеү менән дуҫ булыу ҡамасауламай, — ти Гөлимә Мырҙағәли ҡыҙы.

Шуға ла ритмика дәресенә бөтә уҡыусылар ҙа йөрөй, ә һәләтле балалар иһә бейеү түңәрәгендә лә шөғөлләнә. Ниндәй генә бейеүҙәр өйрәтмәй ул уҡыусыларға: башҡорт, урыҫ, украин, мари һ.б. халыҡ бейеүҙәре менән бергә вальс, ча-ча-ча, кантри нескәлектәрен төшөнә улар.

Көндәр, айҙар, йылдар үтә. Уҡыу йылы аҙағында иһә мәктәптә бейеү ансамбленең йомғаҡлау тамашаһы сағыу бер байрамға әүерелә.

Бына шулай илһамланып, арыуталыуҙы белмәй бейеү сәнғәтенә хеҙмәт итә Гөлимә Мырҙағәли ҡыҙы. 35 йыл ғүмерен биргән ул ошо ижадҡа.

— Үҙемде бәхетле тип иҫәпләйем, — ти Гөлимә Әхмәтшина. — Бөтә донъяға танылған бейеү ансамблендә бейеүем менән бәхетлемен. Мәшһүр Фәйзи Ғәскәровтың уҡыусыһы булыуым менән бәхетлемен. Әле бына уҡыусыларымдың уңыштары менән бәхетлемен. Берҙән-бер улым Булаттың бейеүсе булып китеүенә ҡыуанып бөтә алмайым.

Рудольф Нуриев исемендәге хореография училищеһын тамамлап, бына ун бер йыл Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында бейей Булат. Әсәһенең сәнғәт илендәге табыштарын, уңыштарын арттырырға, киләсәк быуындарға илтергә ниәте ҙур унып. Амин, шулай булһын! Мәңге сағыу, илаһи сәнғәт бит ул бейеү.